БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК И ЛИТЕРАТУРА В УСЛОВИЯХ ГЛОБАЛИЗАЦИИ
И ПОЛИЭТНИЧЕСКОЙ СРЕДЫ: ОПЫТ И ПЕРСПЕКТИВЫ

ISBN 978-5-91608-181-7 С. 17-19

https://doi.org/10.31833/conf_ihll2019.002

УДК 811.512.1’1:811.512.141

**Г. Х. Абдрафиҡова**

*Ордена Знак Почета Институт истории, языка и литературы УФИЦ РАН*
*проспект Октября, 71, Уфа, 450054, Россия*
*E-mail: gulnara1273@bk.ru*

# С. МИРАҪТЫҢ АҘ БИЛДӘЛЕ ХЕҘМӘТЕ ТУРАҺЫНДА

В этой статье речь идет об одном малоизвестном труде видного башкирского общественного деятеля в первой трети XX века, активного члена башкирского национального движения, работника просвещения Сагита Мираса. Работа была издана в виде отдельной книги в 1926 году на арабской графике и на башкирском языке на основе кириллицы ни разу не издавалась. В книге «Первобытная культура людей» С. Мирас рассказывает о возникновении письменности, знаков и цифр, первых алфавитов. В конце автор рассуждает об общетюркской, затем и башкирской письменности на основе арабского алфавита. Эта работа может быть полезна для тюркологов, лингвистов, для всех тех, кто интересуется духовной культурой башкирского народа, в связи с чем требует издания ее на кириллице и введения в научный оборот.

*Ключевые слова:* С. Мирас, первобытная культура, арабографичная книга, первые алфавиты, башкирский язык.

Сәғит Мираҫ (Сәғит Ғөбәйҙулла улы Мирасов) 1880 йылда Ырымбур губернаһының Ҡыпсаҡ волосе Мерәҫ ауылында (хәҙерге Ырымбур өлкәһе Яңы Сергиевка районы) тыуған. Ул — XX быуат башы билдәле башҡорт йәмәғәт һәм мәғариф эшмәкәре. Башҡорт милли хәрәкәтенең актив ағзаһы булараҡ, З. Вәлиди, Ш. Манатовтар менән берлектә I Бөтә башҡорт ҡоролтайын ойоштороуҙа, Башҡорт автономияһын төҙөүҙә ҡатнаша, шул йылдарҙағы ваҡиғаларҙың уртаһында ҡайнай. «Мөхбир», «Башҡорт» гәзиттәренең мөхәррире, ошо осорҙа формалашыу дәүерен кисергән йәш башҡорт матбуғатында үҙе лә актив яҙышыусы. XX быуаттың 20-се йылдарында С. Мираҫ уҡытыу эше менән шөғөлләнә, яңы башҡорт алфавитын төҙөүгә лә тос өлөш индерә.

Башҡорт халҡы тарихының төрлө этаптарын яҡтыртҡан мәҡәләләрендә башҡорттарҙың боронғо хәленән алып артабанғы этаптарҙағы тарихына, уларҙың үҙҙәрен уратып алған халыҡтар менән булған мөнәсәбәтенә үҙ күҙлегенән ҡарап, ҡыҙыҡлы һәм мәғлүмәтле баһа бирә С. Мираҫ. Уның башҡорт ерҙәре, ғәскәре, бейҙәре һәм хандары, шәжәрәләре, ырыу-аймаҡтары, әҙәбиәте, ил өйрәнеүҙә халыҡ әҙәбиәтенең әһәмиәте тураһындағы мәҡәләләре иғтибарҙы йәлеп итмәй ҡалмай. Ул ваҡыттағы бөтә яҙма һәм баҫма сығанаҡтар, шул иҫәптән ваҡытлы матбуғат ғәрәп яҙмаһында булыу сәбәпле, был мәҡәләләрҙең йөкмәткеһе киң массаға ғына түгел, хатта белгестәргә лә билдәһеҙ.

С. Мираҫтың «Кешеләрҙең тәүге мәҙәниәте (Тел, һан, тамға, яҙыу һәм әлифбалар тыуыуы)» тигән хеҙмәте 1926 йылда айырым китап булып баҫылып сыға. Ул шулай уҡ ғәрәп яҙмаһы менән баҫылған. Нәшере — Яңы башҡорт әлифбаһы мәркәз комитеты һәм «Башкнига». Күләме артыҡ ҙур булмаған был китап 60 биттән тора. Уның йөкмәткеһе китапта билдәләнеүенсә ошолай:

«**Мөндәрижәһе**:

1. Керешмәҫтән элек.

2. Тел: уның ҡасан, нисек тыуыуы; уның төрләнеүе һәм тәрәҡҡи итеүе (алға китеү, үҫеш. — Г.А.), һан һәм һанауҙар.

3. Төрк (бында төрки тип аңларға кәрәк, төрөк түгел. — Г.А.) халҡында тамғалар, уларҙың хеҙмәте һәм әһәмиәте. Башҡорт тамғалары, дөйөм төрк халҡында тамғалар, тамғанан әлифбаға күсеү, тамғалар менән тәүге әлифбаларҙың бәйләнеше. Иң тәүге әлифбаларҙан үрнәктәр.

4. Яҙыу: яҙыу нисек, ҡасан майҙанға килгән, вәхшилек дәүерендәге яҙыуҙар, төйөн яҙыу, шәкел яҙыу, һируғлиф — мысырлылар яҙыуы, һиндтар яҙыуы, шуларҙан үрнәктәр, төрктәрҙә яҙыу, уның ҡасан башланыуы, орхон яҙыуы, уйғур яҙыуы, ғәрәп яҙыуы.

5. Әлифбалар: иң тәүге әлифба, уның тармаҡтары, төрк әлифбалары, орхон, ҡоръя, уйғур, монгол әлифбаларының иҫке шәкелдәре, сами енесенән булған финикәлеләрҙең, Ғәрәбстанда хөкүмәт һөргән хәмириләрҙең, Африкалағы хәбәшиләрҙең тәүге әлифбаһынан үрнәктәр. Былар араһында бер-беренә бәйләнеш һәм тамғаға оҡшауҙары. Башҡорт, дөйөм төрктәргә ғәрәп хәрефе нисек кергән, ғәрәп әлифбаһы, уның төбө, ғәрәп хәрефенең үҙгәреүе, ғәрәп хәрефенең даирәһе ҡыҫыла барыуы, уның сәбәбе, тел ғалимдрының һәм дөйөм төрк халыҡтарының ғәрәп хәрефенә ҡарашы, ғәрәп әлифбаһының кәмселеге, уны өйрәтеүҙә ауырлыҡ. Ғәрәп хәрефендә матбуғат. Латин әлифбаһы, уның төбө, хеҙмәт даирәһе, уның тулы һәм уңайлылығы, уның тарала, киңәйә, көсәйә барыуы. Төрктәр араһында латинсылыҡ ҡасан һәм кемдәр тарафынан башланды. Төрк һәм фарсы ғалимдарының латин хәрефенә ҡарашы. Латин хәрефен ҡабул итеүҙә тюркология ҡоролтайының ҡарары, хәҙерге көндә төрк халыҡтары латин хәрефенә күсеүҙе ниңә теләйҙәр. Һуңғы һүҙ.» [Мираҫ, 1926, 3]

Был әҫәрҙең яҙылыу маҡсатын автор үҙе ошолай билдәләп: «…минең маҡсатым тел, яҙыу һәм әлифбаларҙың нисек майҙанға сығып, уларҙың нисек тәрәҡҡи итеүен аңлатыу булғанлыҡтан, тел һәм яҙыуҙарҙың нисек һәм ни рәүешле төрләнеүенә үә уның сәбәптәренә генә туҡталам» [Мираҫ, 1926, 6], — ти.

Автор яҙыу һәм әлифбалар тураһындағы ҡайһыбер мөһимерәк материалдарҙың тюркология съезы мәлендәге (1926 йылда Баку ҡалаһында үткән I Бөтә Союз тюркология съезы тураһында һүҙ бара. — Г.А.) әлифбалар күргәҙмәһенән алыныуын да әйтә [Мираҫ, 1926, 5], хеҙмәтен яҙғанда кемдәр әҫәрҙәренә таяныуын күрһәтеп, китаптың аҙағында уларҙың исемлеген бирә [Мираҫ, 1926, 60]. Улар араһында Ә. Ағаевтың «Төрк мәҙәниәте тарихы», Черневскийҙың «Ҡулъяҙмалар»ы, Н. Ғасимдың «Иҫке төрөк яҙыуы», Гельмольттың «Инсаиәт тарихы», Ғ. Сәғҙиҙең «Кешелек донъяһында тел, әҙәбиәт, яҙыу» кеүек хеҙмәттәр һәм башҡалар бар.

Белеүебеҙсә, XX быуаттың 20-се йылдар аҙағында башҡорт телен яйлап латин алфавитына күсереү башланһа ла, 30-сы йылдар башына, ә халыҡ араһында 50-се йылдарға, тиклем ғәрәп графикалы яҙма дауам итә. Ғәрәп хәрефтәре беҙҙең халыҡ өсөн өйрәнеүгә лә, яҙыуға ла ауыр, ҡулайһыҙ булыуы тураһында һүҙ йөрөтөп, С. Мираҫ башҡорт телен латин алфавитына күсереүҙе хуплауын белдерә. Билдәле булыуынса, үрҙә телгә алынған тюркология съезындағы төркиҙәргә үҙ-ара аралашыуҙы, аңлашыуҙы төрлө яҡлап уңайлатыу өсөн әлифбаларҙы латин хәрефтәре нигеҙендә эшләү тураһындағы фекер ҙә төрки халыҡтары араһында хуплау таба.

С. Мираҫтың был китабы ғәрәп графикаһынан транслитерация эшләнеп, кирилл алфавитлы башҡорт телендә баҫылып сығып, ғилми әйләнешкә индерелергә хоҡуҡлы. Ул тюрко-

логтар, тел тарихын өйрәнеүсе белгестәр, ғөмүмән башҡорт халҡының рухи мәҙәниәте менән ҡыҙыҡһыныусылар өсөн ҡыҙыҡлы буласаҡ.

**Әҙәбиәт**

Мираҫ С. Г. Кешеләрҙең тәүге мәҙәниәте (Тел, һан, тамға, яҙыу һәм әлифбалар тыуыуы). Өфө: «Башкнига», 1926. 60 бит.

**G. H. Abdrafikova**

*Order of the Badge of Honour Institute of History,*
*Language and Literature UFRC Russian Academy of Sciences*
*October Avenue, 71, Ufa, 450054, Russia*
*E-mail: gulnara1273@bk.ru*

**ON THE LITTLE-KNOWN WORK OF S. MIRAS**

This article deals with one little-known work of a prominent Bashkir public figure in the first third of the 20th century, an active member of the Bashkir national movement, an education worker Sagit Miras. The work was published as a separate book in 1926 on the Arabic script and in the Bashkir language based on the Cyrillic alphabet has never been published. In the book "The Primeval Culture of People" S. Miras talks about the emergence of writing, signs and numbers, the first alphabets. In the end, the author discusses the common Turkic, then Bashkir script based on the Arabic alphabet. This work can be useful for turkologists, linguists, for all those who are interested in the spiritual culture of the Bashkir people, and therefore requires its publication in Cyrillic and introduction into the scientific circulation.

*Keywords*: Sagit Miras, primitive culture, arabographic book, first alphabets, Bashkir language

**References**

Miras S. G. The Prevailing Culture of People (Language, Number, Sign, Letter, and Primer). Ufa: “Bashkniga”, 1926. 60 p. {Mïraç S. G. Keşelärẓeñ täüge mäẓänïäte (Tel, han, tamğa, yaẓıw häm älïfbalar tıwıwı). Öfö: «Başknïga», 1926. 60 bït}.